Уҡытыусы: Исламова Зүлиә Хәмзә ҡыҙы

Класс: 5Б .

## Дәрестең технологик картаһы

| | |
|---|---|
| Дәрес темаһы | Лексик тема : **Башҡорт халҡының милли аштары. Ҡымыҙ – файҙалы эсемлек.** |
| Дәрес төрө | Ҡабатлау, йомғаҡлау дәресе. |
| Дәрес маҠсаты | **Белем биреү маҡсаты**: тема буйынса уҡыусыларҙың белемдәрен арттыу,Башҡорт халҡының милли аштары менән танышыуҙы дауам итеү. Ҡымыҙ һәм башҡа эсемлектәр менән танышыу.<br>**Үҫтереүсе:** тема буйынса бәйләнешле телмәр күнекмәләрен үҫтереү, өйрәнгән һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу. Уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен үҫтереү.<br>**Тәрбиәүи**: Телгә һөйөү, туған тел һәм илгә , бер-береһенә ҡарата ихтирамлылыҡ тойғолары тәрбиәләү, башҡорт милли культураһына , ғөрөф- ғәҙәттәренә ихтирам тәрбиәләү. |
| Көтөлгән һөҙөмтәләр: | **Предмет УУЭ һөҙөмтәләре**: тема буйынса яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, уларҙы бәйләнешле телмәрҙә Ҡулланыу.<br><br>**Метапредмет (предмет-ара) УУЭ һөҙөмтәләре**:<br><br>а) регулятив: уҠытыусы менән берлектә дәрес темаһын, маҠсатын билдәләргә күнегеү, булған белемдәрен барлау, баһалау; б) танып белеү: өлгө буйынса эш итә белеү, өйрәнеү (төркөмләп эшләй белеү, файҙалыһын һайлау); в) коммуникатив: темаға Ҡарата бәйләнешле текст төҙөй белеү, үҙ-ара аралашыу, төркөмдә хеҙмәттәшлек итә белеү. |

| | |
|---|---|
| | **Шәхси УУЭ һөҙөмтәләре:** үҙаллылыҡ сифаттары үҫтереү, туғандарына, дуҫтарына, класташтарына иғтибарлы, ихтирамлы булыу, этикет белеү. |
| Йыһазландырыу | Мультимедиа проекторы, аудиояҙма (5 класс уҡыусылары өсөн башҡорт теленән электрон дәреслек? Интернет селтәренән мәғлүмәттәр, Башҡорт милли аштары( ҡымыҙ, сәк-сәк…) |
| Предмет-ара бәйләнеш | Тормош һабаҡтары, биология, тирә-яҡ мөхитте өйрәнеү,Башҡортостан мәҙәниәте. Рус теле һәм әҙәбиәте менән туранан тура бәйләнеш, рус теле менән дәресте сағыштырып алып барыу |

| Дәрес этаптары | Уҡытыусы эшмәкәрлеге | Уҡыусылар эшмәкәрлеге | Дәрестең һәр этабында формалаштырылған УУЭ *(регулятив, танып белеү, коммуникатив, шәхси)* |
|---|---|---|---|
| I.Ойоштороу моменты.<br><br>Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу | I.- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!<br><br>- Хәйерле көн!<br><br>- Хәлдәрегеҙ, кәйефтәрегеҙ нисек?<br><br>Һаумы, Ҡояш!<br>Һаумы, дуҫым!<br>Һаумы , минең укытыусым! | Уҡыусыларҙың яуаптары | **Регулятив**: үҙҙәренең уҡыу эшмәкәрлеген ойошторалар;<br><br>**Шәхси**: белем алыуға, уҡыуға ҡарата, дәрескә ыңғай ҡараш күрһәтәләр.<br><br>**Танып белеү**: яңы белем алыу кәрәклеген аңлайҙар, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштыралар. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | II.**Фонетик-орфоэпик күнегеүҙәр.**<br><br>- Телебеҙҙе шымартып алайыҡ. Минең арттан ҡабатлағыҙ.<br><br>**Ға-ға-ға –Әйҙә киттек баҙарға.**<br>**Аҡ-аҡ-аҡ- Килә бит бөгөн ҡунаҡ,**<br>**Әк-әк-әк-Әсәй бешерә сәк-сәк,**<br>**Һыр-һыр –һыр-Атай ҡуйҙы самауыр,**<br>**Быҙ-быҙ-быҙ- Күстәнәстәр алабыҙ,**<br>**Кинәнгәнсе ҡунаҡтарҙы ,**<br>**Аш- һыу менән һыйлайбыҙ.** | Уҡыусылар башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрен, һүҙҙәрҙе уҡытыусы артынан ҡабатлайҙар.<br><br>. | |
| II.Уңыш ситуацияһы тыуҙырыу (белемдәрҙе актуаллəштереү) | Һеҙ күреп тороуығыҙса бөгөн беҙҙә ябай дәрес түгел.<br>- Борон башҡорттар ҡайҙа йәшәгәндәр әле?<br>-Беҙҙе башҡорт тирмәһенә ҡунаҡҡа саҡырҙылар.<br>- Өҫтәлдә төрлө тәмлекәстәр.<br>- Ни өсөн өҫтәл ҡоралар һуң?<br>- Дөрөҫ, сөнки башҡорт халҡы бик ҡунаҡсыл булған. | Уҡыусылар яуап бирә. | **Регулятив:** уҡыу мәсьәләһен аңлау, ҡабул итеү, маҡсатҡа ярашлы эштәрҙе башҡарыу, ҡуйылған һорауға яуап бирә белеү.<br><br>**Танып белеү:** кәрәкле мәғлүмәтте текстан ишетеп аңлау.<br><br>**Коммуникатив:** тыңлайҙар |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | - Өҫтәлгә нимәләр ҡуйылған? ( Өҫтәлдәге һыйҙы әйттереп сығабыҙ.) <br>-Былар бөтәһе ниндәй аштар инде? <br>**-Башҡорт милли аштары,** дөрөҫ. <br>- Был беҙҙең хазинабыҙ , шулаймы? <br>-Нимә ул хазина? | Уҡыусыларҙың яуап биреүе | һәм диалогка инәләр, әңгәмәгә ҡушылалар <br><br>**Шәхси**: уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу, уҡыуға, яңылыҡ белеүгә ынтылыш, <br><br>ҡыҙыҡһыныусанлыҡ сифаттары формалаша. |
| III.Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу. | - Шулай итеп, беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ? <br>- Үҙебеҙгә ниндәй маҡсат Ҡуябыҙ? <br>**–Башҡорт милли аш – һыу атамаларын, эсемлектәрен иҫтә ҡалдырырға,** <br>-Өйгә эштәрҙе башҡарҙығыҙмы,? <br>-Һеҙгә башҡорт аш- һыу атамаларын ятларға һәм рецепттар төҙөп килергә ине. <br>- | **Башҡорт милли аш-һыуы** тураһында һөйләшәсәктәре тураһында әйтәләр. <br><br>Уҡытыусы менән берлектә дәрескә маҡсат ҡуялар. <br><br>Балалар өй эштәре менән таныштыралар.( сығыштар) | **Танып белеү**: логик фекерләү (сылбырын) алгоритмын төҙөйҙәр. <br><br>**Регулятив:** уҡытыусы менән берлектә дәрестең маҡсатын билдәләйҙәр. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| IV.Яңы материалды өйрәнеү.<br><br>Уҡыу проблемаһын сисеү. | **Әңгәмә.**<br>-Борон башҡорттар нимә менән шөғөлләнгәндәр?<br><br>-Һәм ошо шөғөлдәр өҫтәлдәрендә сағылыш тапҡан да инде.<br><br>-Мал тигәндә нимәләрҙе күҙ уңында тотабыҙ? Һарыҡ, ат, йылҡы малы, һуңғараҡ ҡаҙ, өйрәк, тауыҡ…<br><br>Ни өсөн йылҡы малын , һарыҡ үрсетеү ҡулайлы, йәтеш булған**?**<br><br>**Һүҙлек һүҙҙәре;**<br>**-Йылҡы-Лошади**<br>**-Бейә-кобыла,**<br>**-Эсемлек- напиток,**<br>**-файҙалы-полезный,**<br>**Шифалы- целебный**<br>**-Һаба- приспособление для кумыса,**<br>-Ни өсөн мин ошо һүҙҙәрҙе һүҙлек өсөн алғанмын?<br><br>Башҡорт эсемлектәре менән | - Мәҫәлән , **Умартасылыҡ- бал.**<br>**- Игенселек – төрлө ҡамыр аштары,**<br>**- Малсылыҡ иһә ит аҙыктары,**<br><br>Бейә һөтөнән ҡымыҙ эшләйҙәр, һыйыр һөтөнән – ҡатыҡ, ҡатыктан- айран эшләйҙәр. | **Регулятив:** өлгө буйынса эшләй белеү, төркөмдә эшләй белеү.<br><br>**Танып белеү:** кәрәкле мәғлүмәтте һайлап алыу, рефлексия үткәрәләр, үҙҙәренең эштәрен яҡлай беләләр, анализ бирәләр<br><br>**Коммуникатив:** монологик телмәр төҙөй белеү, бер-береһе менән хеҙмәттәшлек итә белеү, үҙ эштәрен анализлау, башҡаларҙы тыңлай белеү, әңгәмәгә ҡушыла белеү формалаша<br><br>**Шәхси:** һаулыҡ өсөн файҙалы аҙыҡ-түлекте ашау кәрәклеген аңлайҙар, үҙҙәренең һаулығы өсөн яуаплылыҡ тойғоһо арта. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | танышыу.<br><br>**Дәреслек менән эшләү**:<br><br>Дәреслектәге 384-се күнегеүҙе башҡарабыҙ.Уҡып тәржемә итәбеҙ. | | |
| V**. Ял минуты** | - Уйын уйнап, ял итеп алайыҡ.<br><br>Иртә торҙоҡ, кейендек<br>Бейә һауырға киттек.<br>Эйеләбеҙ, бөгөләбеҙ<br>Бейә һауып беҙ бөттөк.<br>Туғыйбыҙ ҙа, туғыйбыҙ<br>Ҡымыҙ тәмле булһын тип,<br>Бер, икене тыпырлайбыҙ<br>Арып китһәк беҙ туғып.<br>Тәмле булды ҡымыҙыбыҙ<br>Бергәләшеп бешкәс беҙ. | Уҡыусылар ял минутын уҡытыусы менән башҡаралар.. | **Шәхси:** уйында ҡатнашыу мәҙәниәте формалаша, уҡыу материалына ҡыҙыҡһыныу арта. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| VI.Белемде нығытыу(Яңы белемде практикала ҡулланыу) | . <br><br> **(Әңгәмә**. **Күнегеүҙәр аша белемдәрҙе нығытыу:** <br><br> **1-се эш** <br><br> Һеҙҙең алдығыҙҙа аш- һыу һәм эсемлектәр. <br><br> 1-се рәт-Эсемлектәрҙе, <br><br> 2-се рәт-Ҡамыр аштарын, <br><br> 3-сө рәт-ит аштарын айырып яҙып алабыҙ. <br><br> **Бауырһаҡ, сәк-сәк, буҙа, ваҡ бәлеш, ҡымыҙ, айран, һөт, ҡатыҡ, бишбармаҡ, ҡаҙы, ҡоймаҡ, ҡыҫтыбый, ҡуллама.** <br><br> **2-се эш** <br><br> Дөрөҫ итеп тоташтыр карточкаларҙа. <br><br> **3-сө эш** | Әңгәмәлә ҡатнашалар. <br><br> Бирелгән эштәрҙе дәфтәрҙәрҙә башҡаралар. | **Шәхси:** тасуири уҡыу күнекмәләре формалаша, уҡыуға ҡарата ҡыҙыҡһыныу <br><br> **Регулятив:** уҡыу мәсьәләһен (биремен) аңлау, ҡабул итеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу, ҡуйылған һорауға яуап бирә белеү. <br><br> **Коммуникатив:** диалог төҙөйҙәр, һорауҙарға яуап бирәләр, башҡаларҙы тыңлай белеү, әңгәмәгә ҡушыла белеү формалаша <br><br> **Танып белеү:** анализлау, сағыштырыу, алған мәғлүмәтте дөйөмләштереү |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | Артыҡ һүҙҙе тап.(Слайдта)<br><br>**4 -се эш**<br><br>Ребустар, йомаҡтар менән эштәр. | | |
| VII. Өйгә эш | Яңы һүҙҙәрҙе ятларға,<br>Ҡуллама нимә ул ? белеп килергә, рецептын төҙөргә. | Көндәлеккә өй эшен яҙалар. | **Танып белеү:** кәрәкле мәғлүмәтте һайлап алыу, анализлай, һайлай белеү.<br><br>**Регулятив:** яңы уҡыу мәсьәләһен ҡабул итә белеү, үҙҙәренең эшмәкәрлеген планлаштырыу.<br><br>**Коммуникатив**:яңы һүҙҙәр ятлау |

| | | | |
|---|---|---|---|
| VIII.Дәресте йомғаҡлау.<br><br>Эшмәкәрлеккә рефлексия. | - Шулай итеп, бөгөн дәрестә нимә белдегеҙ?<br><br>- Нимәгә өйрәндегеҙ? Дәрес башында ҡуйған маҡсаттарға ирештекме?- Алған белемдәрегеҙ тормошта кәрәк булырмы? Уҡыусыларҙы баһалау.<br><br>**Рефлексия ҡағыҙ биттәрендә.**<br><br>- Дәрестә алған белемдәрегеҙҙе тормошта ла ҡулланырһығыҙ, тип ышанам. Рәхмәт. | Уҡыусыларҙың яуаптары. Нимәгә өйрәнеүҙәре тураһында әйтәләр<br><br>.Дәрес башында ҡуйған маҡсаттарҙы иҫкә төшөрөү,<br><br>баһалау битендә үҙҙәренә баһалар ҡуялар. | **Регулятив**: үҙҙәренең эшмәкәрлегенә баһа биреү, уҡытыусының баһаһына адекват ҡараш формалаша.<br><br>**Шәхси:** үҙүҫеш, баһалау һәләте үҫә. |